# Баланың телмәрен үҫтереү өсөн ата-әсәләргә кәңәштәр



МБМБУ “102-се Башҡорт балалар баҡсаһы”

Әҙерләне: Хоҙайғолова Нәсимә Миңлеәхмәт  ҡыҙы

*Туған тел - ул ата-әсәнең теле, донъяла тәү ишеткән һүзең, асылған телең, рухи моңоң (Ғ.Хөсәйенов)*

Туған тел – рухи байлығыбыҙҙың хазинаһы. Халкыбыҙҙың быуаттар буйы йәшәп килгән быуындан-быуынға бирелгән тормош тәжрибәһе, ғөрөф-ғәҙәте, әхлак ҡанундары, йола-байрамдарын берләштереүсе һәм аңлатыусы үҙәк. Туған телде кескәй балалар ятаһын һәм аралашһын өсөн ата-әсәләрҙең роле ҙур,сөнки донъяны таныһ-белеү ғаиләләге тел мөхитенән тора.

Һеҙҙең төп маҡсатығыҙ – баланы уратып алған мөхиткә, үҙгәрештәргә битараф булмаҫҡа, уны күҙәтеп яраҡлашырға, фекер еткерергә өйрәтеү.

Бының өсөн өйҙәге көндәлек предметтарҙың атамаларын билдәләп әйтегеҙ, һорау-яуап формаһында уйнап аралашығыҙ. Үҙ-ара көндәлек тормошта,ата-әсәләр, тыуған телдә аралышыуҙы өҫтөнлөк итегеҙ.

Саф һауаға сыҡҡанда, бала өсөн ниндәйҙер яңылыҡ билдәләгеҙ, үҙен дә шул яңылыҡ эҙләргә өйрәтегеҙ: машиналарҙың төҫөн билдәләгеҙ, түтәлдәге сәскәләр атҡан (йәки һулыған), ҡар (ямғыр) яуған, ҡояшлы матур көн һ.б.

Баланың күргәнен, иҫендә ҡалғандарҙы һүрәтләргә тәкдим итегеҙ. Пластилин менән предметтар эшләгеҙ. Был ябай ғына һүрәт төшөрөү һәм пластилиндар менән эшләү ҡул суҡтарының ваҡ моторикаһын үҫтерә, ижадын байыта.

Баланың мейеһе бармаҡ осонда урынлашҡан. Бармаҡ уйындары баланың ҡул мускулдарын нығытыу, иғтибарын, хәтерен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүгә булышлыҡ итеү менән бер рәттән, телмәр үҫеүенә лә ҙәр йоғонто яһай.

Шуның өсөн ата-әсәләргә ҡул суҡтарының үҫешенә ҙур иғтибар бүлергә кәрәк. Мәҫәлән: бармаҡ уйындарын уйнатырға, һүрәт буярға, пластилин йәки тоҙло ҡамыр менән эшләргә, төймәләр эләктерергә, конструктор төҙөүгә өҫтөнлөк бирергә кәрәк.

Бала менән бергә уйнағыҙ, сөнки уйын кескәйҙәр өсөн донъяны танып-белеү, тәрбиә һәм белем алыу, физик сынығыу  сараһы. Үҙләштерелгән уйын аша һүҙ запасын байыта һәм  үҙенең һөйләмендә активлаштыра. Бөгөнгө көндә кибеттә дидактик уйындарҙың төрлөһөн һайлап алып була, бергәләшеп уйнап ваҡыт үткәрһәгеҙ бала өсөн фәһемле булыр.

Бергәләшеп йомаҡ сисегеҙ, шиғырҙар ятлағыҙ, кескәйҙәр өсөн йырҙар тыңлап йырлағыҙ. Балағыҙға йышыраҡ әкиәттәр китабын уҡығыҙ, өҫтөнлөкте һүрәткә бай әҙәбиәткә бирегеҙ, уға аңламаған урындарын аңлатығыҙ. Күп осраҡта бала бер үк әкиәтте ҡабаттан уҡырға һорай, был билдәле күренеш. Шулай итеп ул  оҡшаған әкиәтте  иҫендә ҡалдыра, интеллектуаль һәм эмоциональ үҫешенә булышлыҡ итә.

Был саралар  балаларҙың фантазияһын һәм ижадын, телмәрен байыта, ферерҙәрен еткерергә булышлыҡ итә, һеҙҙе  үҙ кескәйҙәрегеҙ менән яҡынайта  һәм иң мөһиме туған телгә, тыуған иленә һөйөү тәрбиәләй.